*Артур ИҘЕЛБАЕВ*

# Америка-Азия телдәре араһында параллелдәр

Билдәле булыуынса, Америка континентына кешеләр тәү башлап бынан 20-30 мең йылдар элек — һуңғы ҙур боҙлоҡ ваҡытында барып урынлашҡан.

Төрлө ил ғалимдары ошо ҡарашты нығытыу өлкәһендә ҙур эш башҡарҙы. Улар араһында иң мөһиме, минеңсә, Американың төп халҡы — индеецтар менән Азия халыҡтары араһында бөтә яҡтан сағыштырма параллелдәр үткәреү. Был сағыштырмалар бик мөһим һөҙөмтәләргә нигеҙ бирә. Сағыштырма этнография өлкәһендә эшләгән ғалимдар индеецтар менән Азия халыҡтарының тормош-көнкүре-



*Иҙелбаев Артур Мирас улы 1969 йылда Өфө ҡалаһында тыуған. Башҡаланың 20-се һанлы урта мәктәбендә, Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетында белем алғандан һуң, 1988—89 йылдарҙа армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡас, "Йәшлек" гәзите редакцияһының баш мөхәррире, "Комсомольская правда" гәзите редакцияһының Өфөләге вәкәләтлегендә генераль директор булып эшләй. Хәҙерге ваҡытта "Неделя" нәшриәт йортон етәкләй.*

шендә, матди культураһында, мәжүси ышаныу ҡараштарында, фольклорында күп кенә ҡәрҙәш параллелдәр таба. Бындай параллелдәр көнкүреш әйберҙәрендә (һауытһаба, йорт-ҡура һ.б.), орнамент һәм ҡая һүрәттәрендә, ғөрөф-ғәҙәттәрҙә лә күренә. Мәҫәлән, Азияның эвенк, эвен, яҡут, юкагир, нанай, удэгей һәм ҡайһы бер башҡа халыҡтары, Американың Юкон йылғаһы индеецтары үлгән туғандарын күммәгән, ә асыҡ ергә, ағасҡа йәки махсус түшәтмәгә бәйләп ҡалдырған. Шундай уҡ күренеште чех ғалимы М. Стингл Төньяҡ Америкалағы Ориноко буйы индеецтарында ла күҙәтә. Тағы бер миҫал: Төньяҡ Американың күпселек ҡәбиләләрендә һәм Көнсығыш Азия халыҡтарында бер үк йыртҡыс хайуанға, ҡошҡа (мәҫәлән, айыуға йәки ҡарғаға), уның тотемына ышаныу йолаһы булған.

Был халыҡтарҙың күп кенә байрамдары, йолалары ла оҡшаш.

Ғалим Е. А. Окладникова Америкалағы һәм Көнсығыш Азиялағы ҡая һүрәттәрендә лә ҙур оҡшашлыҡ барлығын күрһәтә. Бындай оҡшашлыҡтарҙы халыҡтарҙың үҙ-ара ҡәрҙәшлеге, билдәле дәүерҙә бер үк йәмғиәт ҡоролошо кисереүе менән аңлатып була. Ләкин күренекле немец ғалимы Ева Липстың, был оҡшашлыҡтар бер үк ҡоролош өсөн үтә күп, тигән һүҙҙәрен иҫкә алмай булмай. Өҫтәүенә, этнографик оҡшашлыҡтарҙан тыш беҙ антропологик параллелдәрҙе лә иғтибарҙан ситтә ҡалдыра алмайбыҙ. Мәҫәлән, «Этногенез тураһында генетик хәтер» тигән хеҙмәтендә Ю.Г. Рычков менән Е.В. Ящук палеолиттың өҫкө ҡатламында, Себер ерендә бер төркөм популяция булғанлығын һәм уның ике этногенез һыҙығына (Америка һәм Азия монголоидтарына) баш булыуы тураһында әйтелә. Ул Себер—Америка праобщинаһына — 26000±2500 йыл[1]. Йылдарҙың өҫкө сиктәре нәҡ Американа Азиянан кеше күскән мәлгә тура килә.

Антропологик һәм этнографик параллелдәрҙе өйрәнеү Америка-Азияның боронғо бәйләнеш проблемаларын асыҡлау өсөн һис шикһеҙ мөһим. Ләкин, билдәле булыуынса, милләттәрҙең төп һыҙаты һәм уның сығышын билдәләү факторы — тел.

Төрлө регионда йәшәгән халыҡтарҙың телдәрен өйрәнеп һәм улар араһында сағыштырма анализ яһап, был телдәрҙең тамырҙашмы, юҡмы, ул телдәрҙә һөйләшкән халыҡтар бер-берееһенә ҡәрҙәшме, түгелме икәнлеген асыҡлап була. Мәҫәлән, Кесе Азияла йәшәгән төрөктәр менән Алыҫ Көнсығышта көн иткән яҡуттарҙың теле оҡшаш. Улар икеһе лә төрки телдәр төркөмөнә ҡарай һәм алтай телдәре ғаиләһенә инә. Тимәк, был ике халыҡтың сығышы һәм тамыры бер. Ысынлап та, Кесе Азия төрөктәренең дә, яҡуттарҙың да боронғо Ватаны бер — Алтай тауҙары, Монголия. Ә һуң, алда әйтелгәнсә, Көнсығыш Азиянан сыҡҡан Америка аборигендары — индеецтар менән Азия халыҡтары араһында телгә ҡоролған шундай берҙәмлек бармы? Төрлө ваҡытта был һорау менән күп кенә ғалим, тел белгестәре шөғөлләнде.

Индеецтарҙың сығышын тел аша өйрәнеү өлкәһендә хатта бер нисә йүнәлеш тә бар. Мәҫәлән, француз ғалимы Поль Риве: «Индеецтар менән Австралия һәм Океания халыҡтарының телдәре оҡшаш, индеецтар Австралиянан, Океаниянан Америкаға барып сыҡҡандар», — ти.

Үҙенең ҡараштарын П. Риве «Малайо-полинизиецтар Америкала» һәм «Америка кешеләренең барлыҡҡа килеүе» тигән ике китабында яҙып үтә. Ул Америка һәм Австралия-Океания телдәренең ҡайһы бер һүҙҙәрендә оҡшашлыҡ та булыуын таба.

Мәҫәлән:

1. ula, (w) ula — «ут, утын» (австралия телдәре)

ol, hul — «ут, утын» (Көньяҡ Америкалағы чон теле)

2. tana, tena — «ҡулбаш» (австралия телдәре)

tanin — «ҡулбаш» (чон)

3. alun, yal — «сәс» (австралия телдәре)

aal — «сәс» (чон)

Шундай уҡ параллелдәрҙе Риве Төньяҡ Америкалағы хока телдәре менән Океания телдәре араһында ла күрә. Уның ҡарашын А. Пеömбертин һәм башҡа бер нисә ғалим уртаҡ таба. Ләкин, беҙҙеңсә, Америкала кешеләр Океаниянан, Австралиянан түгел, ә Азиянан барып сыҡҡан тип ҡарарға кәрәк.

[1] Рычков Ю. Г., Ящук Е. В. Генетическая память об этногенезе. //Этнические связи народов севера Азии и Америки. — М., 1986.

Был ҡараш, күп һанлы геологик, археологик, антропологик, этнографик дәлилдәр, лингвистика өлкәһендәге эҙләнеүҙәр менән раҫлана.

М. Стинг үҙенең «Томагавкаһыҙ индеецтар» тигән хеҙмәтендә П. Ривеның лингвистик мәғлүмәттәрен нигеҙһеҙ ти һәм уларға үтә эйәрмәҫкә саҡыра.

Азия һәм Америка араһында оҡшашлыҡ параллелдәре тапҡан ғалимдар, әлбиттә, күберәк. Америка лингвистикаһына һәм Америка «тарихи мәктәбенә» нигеҙ һалыусы Франц Боас боронғо Америка-Азия бәйләнештәрен өйрәнгән.

Американың күренекле телсеһе, профессор Сэпир Америка һәм Азия телдәре араһында күп кенә мөһим оҡшашлыҡтар таба. Мәҫәлән, ул Төньяҡ Америкалағы на-дене телдәрендә һөйләшкән индеецтарҙы Азиянан иң һуң күсенгән тип һанай һәм уларҙың телдәре Азиялағы Ҡытай-Тибет телдәре менән оҡшаш тигән фекергә килә.

Айырым ғалимдар индеецтар һәм ҡайһы бер палеоазиат халыҡтары телдәре араһында уртаҡлыҡ таба.

Төньяҡ Америка индеецтарының бер төркөм телдәре, палеоазиат телдәре кеүек үк полисинтетик характерлы. Ул телдәрҙең ҡәрҙәшлегенә ҡайһы бер һүҙҙәрҙең оҡшашлығы ла күрһәтә:

kos — «муйын» (нивхи) палеоазиат тел ғаиләһе

si — nose — «муйын» (апачи) на-дене тел ғаиләһе

kusna — «муйын» (Тенхано) юто-ацтек тел ғаиләһе

kets — tli — «муйын» (кауа) ацтектар

kosse — l — «муйын» (она) Утлы утрау индеецтары теле.

Бер үк һүҙҙең индеецтарҙың төрлө тел ғаиләһенә ҡараған телдәрҙәге оҡшашлығын лингвистар тел төркөмдәренең ҡәрҙәшлеге менән аңлата. Был һорау үҙ ваҡытында ғилми даирәлә киң таралғайны, ләкин әлегә тиклем уға етерлек асыҡлыҡ менән яуап биргән кеше юҡ.

Төрлө Америка телдәренә берҙәм грамматик элементтар ҡуйылған тигән билдәләмә нигеҙендә индеецтарҙың һәм Азия халыҡтары теленең грамматик төҙөлөшөндә берҙәм параллелдәр табып була. Мәҫәлән, Америка индеецтарының бөтә телдәрендә лә ҡылымдың берлектәге 1-се заты өсөн *-м*, 2-се заты өсөн *-н* ялғауҙары хас.

Шундай уҡ күренеште беҙгә Евразияла таралған төрки телдәрендә лә күҙәтергә тура килде.

Мәҫәлән, ҡылымдың берлектәге 1-се заты: барам, эшләйем, ашайым һ.б.

Ҡылымдың берлектәге 2-се заты: бараһың, эшләйһең, ашайһың һ.б.

Төрки халыҡтарының иң боронғо Орхон-Енисей руник яҙмаһының Алтынсы Енисей (Барыҡ, II) эпиграфик тексында беренсе юлдың аҙаҡҡы һүҙе [buldim] тип алына. Руссаға ул «я стал» йәки «я остался» тип тәржемә ителә. Тимәк, бирелгән ялғауҙар иң боронғо төрки яҙмаларында ла ҡулланылған. Был темаға һуңғы мәҡәләләрҙән иғтибарҙы йәлеп иткәне, «Ялҡын» журналында 1984 йылдың 12-се һанында сыҡҡан Әбрар Кәримуллиндың «Кыйтгалар кавышуы» тигән мәҡәләһе. Был мәҡәләлә автор төрки һәм төрлө Америка телдәре араһында сағыштырма параллель үткәрә һәм оҡшашлыҡтар таба.

Дөйөм алғанда, Ә. Кәримуллиндың эшен ыңғай яҡтан баһалап була, ләкин уның бер нисә етешһеҙлеге лә бар.

1. Һүҙҙәрҙең оҡшашлығы яғынан параллель үткәргәндә, ул Азия яғынан тик бер генә тел төркөмөн — төрки телдәрҙе, ә Америка яғынан төрлө региондарҙа (Төньяҡ Америкала, Урта Америкала, Көньяҡ Америкала) йәшәгән һәм бер-береһе менән бер ниндәй бәйләнештә булмаған халыҡтарҙың телдәрен ала.

Ә. Кәримуллиндың, төрки телдәре бер юлы сиу телдәренә лә, майя телдәренә лә, кечуа телдәренә дә ҡәрҙәш, тип раҫлауы бик шикле.

2. Ул үҙенең хеҙмәтендә файҙаланған ҡыҙыҡлы материалдарҙы ҡайҙан алынғанын, ниндәй сығанаҡтар ҡулланғанын күрһәтмәй. Был эштең абруйын кәметә.

3. Кечуа һәм майя менән төрки телдәре араһындағы ҡайһы бер һүҙҙәрҙең ул күрһәткән оҡшашлыҡтары тикшереү процесында дөрөҫләнмәне. Ә ҡалған һүҙҙәрҙең оҡшашлығын беҙ осраҡлы оҡшашлыҡ тип тә әйтә алабыҙ. Ундай параллелдәрҙе, тырышһаң, теләгән бер телдәр араһында табып була. Был, әлбиттә, телдәрҙең ҡәрҙәшлеген иҫбатламай.

Мәҫәлән, башҡорт телендә, алда телгә алынған Австралия аборигендары телендә лә «ял» һүҙе сәс мәғәнәһендә ҡулланыла. Әлбиттә, был ике халыҡтың ҡәрҙәшлеге хаҡында һөйләмәй.

Ләкин Ә. Кәримуллиндың төрки һәм Төньяҡ Америкалағы сиу телдәре араһында үткәргән параллелдәренә иғтибар итмәй булмай, улар башҡа сығанаҡтар менән дөрөҫләнә һәм тулыландырыла.

Был параллелдәр бик ҡыҙыҡлы. Хәҙергә сиу (Төньяҡ Америка телендә):

*таңныйм — уясняю, узнаю;*

*таңныйсың — уясняешь, узнаешь;*

*таңла — уясняй.*

Бында, грамматик төҙөлөш менән бер рәттән, һүҙлек оҡшашлыҡтары ла бар.

Төрки телендә:

*таныйм, аңныйм — уясняю, узнаю;*

*таныйсың, аңныйсың — узнаешь, понимаешь;*

*аңла — уясняй, понимай.*

Күренеүенсә, төрки телендә һүҙҙең бер мәғәнәһендә *т* һаңғырау тартынҡы төшөп ҡалған. Бындай миҫалдар төрки телдәренең башҡа һүҙҙәрендә лә осрай. Әйтәйек: *тояҡ — аяҡ.*

Был миҫалда *тояҡ* һүҙенең *т* өнө төшөп ҡалып, *аяҡ* һүҙен барлыҡҡа килтергән.

Шуныһы ҡыҙыҡ, төрки телдәрендә лә, сиу телендә лә өҫтәге һүҙҙәр бер тәүбашланғыс тамырҙан килеп сыҡҡан:

*tang — рассвет, прояснение (сиу)*

*таң — рассвет, прояснение (төрки).*

Америка ғалимы Отто Ренигтың тикшеренеүҙәре арҡаһында, төрки һәм сиу телдәре һүҙҙәрендә тағы ла күп кенә оҡшашлыҡтар табып була:

*каган, ага — вождь, старший (сиу),*

*каһан, хан, аға, ағай — вождь, правитель, старший по возрасту (төрки),*

*инә — мать (сиу),*

*инә, ана — мать (төрки).*

1982 йылда Хакассияла Новоселово ауылы янында асылған Енисей руник яҙмаһында *«Мать-река»* тигән мәғәнә *«ана ҡам»* тип бирелә. Был яҙма төркиҙәрҙең *«ана» (мать)* һүҙенең боронғолоғон иҫбатлай һәм бөгөнгө төрки теле менән сиу теле араһында бәйләнгес звено булып тора.

Ю.П. Аверкиева ҡаҙаҡтарҙың һәм ҡырғыҙҙарҙың (төрки тел төркөмөнә ингән халыҡтар) *«ата»* һүҙенең мәғәнәһе дакота индеецтарының (сиу телендә һөйләшкән бер төркөм ҡәбилә) *«ahta»* һүҙенә тап килеүен билдәләй.

*ата — отец (ҡаҙаҡ һәм ҡырғыҙ телендә)*

*ahta — отец (дакота телендә)*

Күп эҙләнеүҙәрҙән һуң, беҙ ҙә был ике тел араһында оҡшашлыҡтар таптыҡ. Шуныһы ҡыҙыҡ, һирәк-һаяҡ сығанаҡтарҙа осраған сиу телендәге һәр бер һүҙ шундай уҡ мәғәнәләге төрки теленә оҡшаш.

1. Оцети Саковин — семь костров (сиу)
   Ете усаҡ — сем костров (төрки)
2. Тасанке — бешеный, неистовый (сиу)
   Ташанҡы — вспыльчивый, неистовый (башҡорт)
3. Хау — здравствуй (сиу)

Һау, һаумы — приветствие «Как здоровье», «Здравствуй» (башҡорт).

Был ике тел араһындағы оҡшашлыҡтар һүҙ яһаусы ялғауҙарҙа ла күренә. Төрки телдәрендәге һымаҡ уҡ, сиу телдәрендә лә «-са», «-се», «-си», «-сы» ялғауҙары актив ҡулланыла. «Таш-сы».

Отто Рериг буйынса, был ике тел өсөн айырым килештәрҙә лә ялғауҙар уртаҡ.

Урын-ваҡыт килеш — -ла, -лә

Төбәү килеш — -ға, -гә.

Сифаттың артыҡлыҡ дәрәжәһен күрһәтеү өсөн ике телдә лә һүҙҙең беренсе ижеген ҡабатлау киң ҡулланыла:

сап-сапа — очень желтый (сиу),

сап-сары — очень желтый (төрки).

Әйткәндәй, Алясканан Утлы утрауға тиклем бөтә индеецтар телендә иҫәптең беренсе өс һанында «бер», «ике», «уч» һүҙҙәре тамыр булып тора. Белеүебеҙсә, төрки телдәрендә лә иҫәптең беренсе өс һаны шулай яңғырай. Төрки һәм сиу телдәренең ҡәрҙәшлеген уларҙың икеһенең дә агглютинатив булыуы һәм сингармонизмға ҡоролоу факты күрһәтә[1].

Ошо һәм башҡа күп кенә дәлилдәр Америка һәм Азия телдәре араһында параллелдәр булыуын күрһәтә.

Был тема совет ғалимдары тарафынан бик әҙ өйрәнелгән. Ә Америка-Азия телдәре араһындағы параллеллек проблемаһы һаман да үҙенең артабан хәл ителеүен көтә.

[1] Әбрар Кәримуллин. «Кыйтгалар кавышуы». «Ялкын», 1984, №12.